***Шаһивилдан ИҘРИСОВ***

# “Назы етмәҫ кеүек һүҙҙәремдең...”

***Шаһивилдан Иҙрисов 1937 йылдың сентябрендә Ейәнсура районы Ҡарабәрҙе ауылында тыуған. 1965 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Комсомол, партия, совет органдарында яуаплы вазифалар башҡара. Әле хаҡлы ялда. Иҫәнгол ауылында йәшәй. Район әҙәбиәт һөйөүселәренең ”Үҫәргән” берекмәһенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе. Йәш сағынан яҙыша. Уның шиғырҙары матбуғат биттәрендә сығып тора, шиғырҙарына яҙылған йырҙар радио-телевидение аша йыш ҡына ишетелә.***

## Әсә хаҡына

Донъя күргәс, тәүге һулышыбыҙ
Әсә тыны менән йомшара.
Кеше булып аяҡ баҫҡансы беҙ
Күпме нужа күрмәй, бисара.

Теләгән ул изге теләктәрен
Биләгәндә мине бишектә.
Ял иттермәй талған беләктәрен,
Яфа сиккән яңғыҙ нисек тә.

Хыялында мин үтәһе юлды
Ҡабат-ҡабат күпме ураған,
Шуҡлығымдан ҡылған
ҡылыҡтарҙы
Яҡшылыҡҡа ғына юраған.

Тыуған көндән егет булғанымса
Ҡараштарың мине наҙлаған.
Теләктәрең, әсәй, ҡабул булған,
Ҡурсалаған бәлә-ҡазанан.

Был донъяға килгән өсөн генә
Бурыслыбыҙ әсә хаҡына.
Әсә хаҡын онотоу — үҙе генә
Хыянат ҡылыу туған халҡыңа!

## Һуңғы хат

*Ана күңеле балала,*
*Бала күңеле — далала.*
*Бала ананы онотһа,*
*Уңалмаҫ яра ала.*

Һаумы, улым! Сәләм киленгә лә,
Ейәндәргә сәләм айырым.
Һуңғы тапҡыр һинең килгәнгә лә
Үтеп китте ун биш йыл ярым.

Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар иҫән-һауҙыр,
Төҫтәрен дә, буғай, оноттом...
Туйыңдан һуң аҡты күпме һыуҙар...
Осрашыуға бөттө өмөтөм.

Ишеткәйнем, улым, баш ҡалала
Бик ҙур кеше булып киткәнһең.
Доктор булған, тиҙәр, белеүемсә,
Геологҡа уҡып бөткәйнең.

Хәйер, аптырарлыҡмы ни хәҙер...
Ярай, докторы ла килешкән...
Солтан олатаң хәл өҫтөндә ята,
Доктор юҡтан ғына бирешкән.

Зәлифәһен, онотманыңмы икән,
Иҫән икән, тиеп ишеткән.
Ҡайтыр, бәлки, тиеп көткән була,
Ике күҙен алмай ишектән.

Ярай, улым, күп һүҙ — китап һүҙе,
Хатҡа барын яҙыу килешмәҫ,
Эш кешеһе — ваҡытың да юҡтыр,
Күнеккәндер инде... бирешмәҫ.

Тик шуныһы ғына... Ауыл бөттө,
Тороп ҡалды өс өй һерәйеп,
Уның ҡарауы Иманғол ауылы
Эшептән тыш киткән ҙурайып.

Гөлсөм инәң тома һуҡыр ҡалды,
Көн дә барам аш-һыу бешереп.
Икәүләшеп сәйләшәбеҙ шунда,
Үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп...

Йәшәүебеҙ һәйбәт, мәтрүшкә бар,
Шул өс йортҡа кәҙә тотабыҙ.
Солтан олатаң донъя ҡуя ҡалһа,
Бесән хәлен нисек итербеҙ?..

Йылғабыҙ ҙа ҡороманы әле,
Сүмес менән һыуын һирперлек.
Һеҙ яратҡан Сатра һуҡмаҡтарын
Үлән баҫмай әле — үтерлек.

Унда-бында лавкаһы ла килә,
Кәрәсин дә ҡышҡа етерлек.
Бишҡайындан сытыр алып ҡайтһам,
Тормошома шөкөр итерлек.

Ғәфү итсе, үҙ турамда, улым,
Бәйнә-бәйнә итеп яҙамын.
Белеп ҡалһын, тием, белеп булмай
Тыуыр көндә низәр яҙғанын...

Ана шулай белмәй тороп ҡалдым —
Ейәнемдең туйын күрмәнем,
Гөлназ ҡыҙымдың да башын һыйпап,
Сәскәйҙәрен биштән үрмәнем.

Ярай инде... Иҫән-һау булһындар.
Беҙ күргәнде улар күрмәһен.
Ҡартлыҡ көнөгөҙҙә һеҙҙең һымаҡ
Ҡайта алмай ситтә йөрөмәһен.

Аптырайым шуға: ошо почта
Бер ҙә хатты килтереп еткермәй,
Туйҙарҙан һуң ике хатың килде,
Рәхмәт, әле хәтерең иҫкермәй.

Эшең күптер инде, хат яҙырға
Ваҡытың да, бәлки, ҡалмайҙыр.
Миңә яҙған хатты йәшнигенән,
Бәлки, почта барып алмайҙыр...

Улай тиһәң, улым, пенсиямды
Айҙан-айға теүәл бирәләр,
Һирәк-һаяҡ хәл белешеп китә
Урындағы бошмаҫ түрәләр.

Ошоноң менән теүәлләнә хатым,
Һаулыҡ, бәхет бирһен үҙеңә.
Юйылмаған әле өмөттәрем,
Ҡайтам, әсәй, тигән һүҙеңә.

Улым, бәлки, бүтән хат та яҙмам,
Ҡарай ҙа алмам инде йөҙөңә.
Бәхилләшеп ҡуям: ”Эшең ташлап,
Ҡәберемә ҡайтып йөрөмә!”

Хуш!.. Әсәң...



## Бурыслымын һиңә

Кендек инәм ҡотлап ҡулға алһа,
Йәшәр йәнде һин бит биргәнһең,
Татлы төштәр күреп йоҡлағанда
Тәүге йылмайыуым күргәнһең.

Әсәй, тиеп беҙҙең тел асылған,
Моңдар һеңгән бишек йырынан,
Болоҡһоған күңелем баҫылған,
Ойоғанмын һинең йылында.

Түҙемлегең, әсәй, сабырлығың
Тәрән күлдең тыныс йөҙөндәй.
Был донъяның барлыҡ матурлығы
Һыйынышҡан һинең үҙеңдә.

Ниндәй йырҙар, әсәй, йырлаһам да,
Һиңә тиңдәш йырҙы һала алмам,
Наҙы етмәҫ кеүек һүҙҙәремдең,
Бурыслымын һиңә мин — балаң.

## Яҙ байрамы

Ҡәҙерләмә бүләк итәм
Ал сәскә гөлләмәһен.
Һаулыҡ, бәхетте тәбиғәт
Һеҙҙән һис йәлләмәһен!

Йөрәктәрҙә яҙ йылыһы,
Күңелдәрҙә сафлығы,
Китмәһен әсәй йөҙөнән
Яҙғы байрам шатлығы.

Дан йырлайбыҙ һеҙгә бөгөн,
Ырыҫлыҡ яҡлаусылар,
Ир намыҫын, йорттоң ҡотон
Сәмләнеп һаҡлаусылар.

Ҡайғыларҙың йөҙөгөҙгә
Төшмәһен шәүләләре.
Күңел тыныслығы һеҙгә,
Донъя әүлиәләре.

## Ялҡын булып янды йәшлегебеҙ

*Р.М.Мәхмүтоваға*
*бағышлана*

Ялҡын булып янды йәшлегебеҙ,
Көҙҙәремдә ҡояш көлмәне.
Йәшкә мансып һалҡын
мендәремде,
Өмөтөмдө һаман өҙмәнем.

Ышандым мин тыуыр алһыу таңға,
Көтә бит һуң таңды ҡоштар ҙа.
Йәшлектәге дуҫтар һуҡһа һанға,
Бирешмәмен, тинем, ҡыштарға.

Йәйҙәребеҙ беҙҙең бергә үтте,
Һөйөү йылыһында ҡойондоҡ.
Көтмәгәндә һалҡын елдәр иҫһә,
Дуҫтар ҡуйынына һыйындыҡ.

Үткән йылдар, иҫкән елдәр
һымаҡ,
Берәм-берәм һүрә хистәрҙе,
Ә шулай ҙа яҙым кеүек тоям
Дуҫтар менән булған кистәрҙе.

